*Хаят ЙОСОПОВА,*
*Ишембай ҡалаһы һәм районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының яуаплы сәркәтибе*

# БАШҠАРАҺЫ ЭШТӘР БИХИСАП

Ишембай ҡалаһы һәм районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ошо төбәктең ижтимағи, сәйәси һәм мәҙәни тормошонда билдәле бер урын биләп тора. Уның ағзалары үҙ эштәрен башҡорт халҡының тормошондағы төрлө йүнәлештәге ихтыяждарын иҫәпкә алып ҡорорға тырыша. Был ижтимағи ойошма төрлө һөнәр, төрлө ҡатлам кешеләре менән эш алып бара. Башҡарылған эштәрҙе, ҡаҙаныштарҙы барлағанда ҡала башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының элекке рәйесе Рафиҡ Абдрахман улы Ғүмәров һәм район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының элекке рәйесе Хәлил Моғаттар улы Йомағужиндарҙы билдәләп үтеү урынлы булыр. Улар үҙҙәренең тормош тәжрибәһенә таянып, милләттең киләсәген күҙалларлыҡ ҡарарҙар ҡабул итеүгә йүнәлеш биреүсе көс булып торҙо.

Ҡала һәм район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетында ижтимағи, сәнәғәт, ауыл хужалығы, мәҙәниәт, мәғариф, матбуғат бүлектәре булдырылды. Ошо йылдың май айында үткәрелгән ҡоролтайҙа башҡарма комитет рәйесе итеп 2-се республика башҡорт гимназия-интернаты директоры, бик күп йылдар башҡорт милли хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашыусы Гөлназ Ғафир ҡыҙы Әхмәҙиева һайланды.

Ижтимағи бүлек етәксеһе Сибәғәт Ғибәт улы Рахманғолов — «Юрматы» башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе, бер үк ваҡытта башҡа ижтимағи берекмәләр, ойошмалар, үҙәктәр менән бәйләнеште лә тәьмин итә.

Башҡарма комитет ағзалары ҡала һәм район предприятиелары, хужалыҡтар эшселәре менән даими осраша. Ҡала һәм район хакимиәтенең сәнәғәт бүлеге етәксеһе И.Ф. Зөлҡәрнәев квалификациялы юридик ярҙам күрһәтә. Төрлө ижтимағи, мәҙәни сараларҙы финанслау мәсьәләһе лә ошо уҡ бүлек ҡатнашлығында ғәмәлгә ашырыла.

Башҡорт халҡының мәҙәни зауығын ҡәнәғәтләндереүҙе үҙебеҙҙең төп бурысыбыҙ тип иҫәпләйбеҙ, шуға ла «Өлгөлө ғаилә», «Әлифба», «Өләсәйҙәр байрамы», «Башҡорт һылыуҡайы», «Ҡышҡы балҡыш», «Һаумы, Яңы йыл!» һәм башҡа кисәләрҙе үткәреү ғәҙәткә инеп китте. Ҡала һәм район хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы начальнигы Илүзә Морат ҡыҙы Зөлҡәрнәева, ҡоролтайҙың башҡарма комитеты ағзаһы булараҡ, беҙҙең алға ҡуйылған бурыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа тос өлөш индерә.

*Хаят Йосопова 1950 йылда Ишембай ҡалаһында тыуған. 1974 йылда БДУ-ның филология факультетын тамамлай. 1986 йылдан Ишембай ҡалаһы һәм районының «Торатау» гәзите мөхәррире урынбаҫары, ошо уҡ ҡала һәм район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының яуаплы сәркәтибе вазифаларын башҡара. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң информация хеҙмәткәре.*





Эштең башында уҡ ауылдарҙа һәм ҡасабаларҙа Аҡһаҡалдар ҡоро ойоштороуға етди иғтибар бүленде. Әлеге ваҡытта боронғо башҡорт ауылдары Смаҡай, Тирмән Йылға, Иҫке Ишембай ҡасабаларындағы Аҡһаҡалдар ҡорҙары матур ғына эшләп килә. Бөтә ерҙәге кеүек үк, уларҙа ла ер мәсьәләһе киҫкен тора. Урындағы халыҡты ерһеҙ ҡалдырмау буйынса Смаҡай ауылының Аҡһаҡалдар ҡоро алып барған эш баһалап бөткөһөҙ. Әйтергә кәрәк, ҡала һәм район хакимиәтенең архитектура бүлеге йорт төҙөү өсөн был ҡасабала ер бүлгәндә Аҡһаҡалдар ҡороноң фекерен иҫәпкә ала. Ҡорҙоң етәксеһе, ҡала советы депутаты, ҡала советы рәйесе урынбаҫары, ҡоролтайҙың башҡарма комитеты ағзаһы Әнүәр Хөснулла улы Шәнгәрәев башҡа урындарҙа ла ошондай уҡ эшлекле Аҡһаҡалдар ҡорҙарын булдырыу өсөн бар тырышлығын һала.

Милли интеллигенция 90-сы йылдар башында ҡалала башҡорт гимназияһын асыуға өлгәшкәйне, ә 1996 йылда бик ҙур ауырлыҡтар менән булһа ла 8-се һанлы башҡорт мәктәбе асылды. Йәш быуынды халыҡ педагогикаһына таянып тәрбиәләүсе был ижади коллектив үҙенең аҙымдарын йылдан-йыл баҙыҡландыра бара. Быйыл улар республика педагогтары конференцияһында ҡатнашыусыларға быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргә килеп еткән рухи ҡомартҡыбыҙ «Сөмбөлә» байрамын күрһәтеп, маҡтау һүҙҙәренә лайыҡ булды.

Иң ҡыуаныслыһы — беҙҙең ҡалала һәм районда ата-әсәләр балаларын туған телдә уҡытырға теләй. 90-сы йылдар башындағы кеүек өгөтләргә тура килмәй, киреһенсә, 2-се башҡорт гимназия-интернатына имтихандарҙы яҡшы тапшырған балалар ғына ҡабул ителә.

Ҡоролтай ағзалары башҡорт егеттәрен һәм ҡыҙҙарын сит илдәргә ебәреп уҡытыуға ла етди иғтибар бүлә. Ишембай егеттәре Төркиә, Румыния, Мысыр, Иордания һәм башҡа илдәрҙә белем ала.

Үҙ эшебеҙҙә матбуғат саралары менән хеҙмәттәшлек итеүҙе мөһим бурысыбыҙ тип иҫәпләйбеҙ. Халҡыбыҙҙың үткәне, бөгөнгөһө районыбыҙҙың «Восход»—«Торатау» гәзиттәрендә төрлө яҡлап яҡтыртыла. Райондан сыҡҡан билдәле шағирҙар, яҙыусылар, журналистар гәзит биттәрендә йыш ҡына сығыш яһай. Йәш быуында ижад ҡомарын тәрбиәләү маҡсатында, айына бер тапҡыр йәш ижадсылар өсөн «Елкән» бите, эскелеккә һәм наркоманияға ҡаршы «Йәштәр донъяһы» исемле биттәр сығып килә. Быуындарҙың күсәгилешлеген һаҡлау өсөн беҙ йыл һайын Башҡорт дәүләт университетының журналистика факультетына икешәр кешене уҡырға ебәрәбеҙ, артабан уларҙың йәй көндәрендә үҙебеҙҙә практика үтеүҙәрен ойошторабыҙ.

Йәштәрҙә тормошҡа әүҙем ҡараш тәрбиәләү маҡсатында ҡала мәктәптәренә практикаға килгән талиптар менән дә осрашыуҙар ойошторабыҙ, улар менән төрлө темаларға «Түңәрәк өҫтәл» ултырыштарын үткәрәбеҙ.

Ишембай ҡалаһы һәм районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзалары, тормоштоң бар өлкәләренә үтеп инеп, милләттәштәребеҙгә ҡулдан килгән тиклем ярҙам итергә тырыша. Хыялдарыбыҙ яҡты, киләсәктә башҡарыр эштәребеҙ бихисап.

а а а